

# Хәйерле көн, үҫкәндәрем!

*Егерме беренсе апрель.*
*Шаршамбы*
*Матур язоу*

***Һылыу,ҙур,матур,ҡыҙыл.***

***(һорауҙар биреп ҡарау)***

# Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр

Төҫ

Тәм

Форма

Шаян бер ҡыҙ йәшәй. Ул үҙе шаян булһа ла, ярҙамсыл, ҡыҙыҡһыныусан икән. Ниндәй ҙә ниндәй, тип һорарға, ҡыҙыҡһынырға ярата.

Әсәй (ниндәй?) яғымлы, матур, һылыу, хәстәрлекле.
Кишер (ниндәй?) ҙур, тәмле, ҡыҙыл, эре.
Фил (ниндәй?) ҙур, көслө.
Ай (ниндәй?) түңәрәк, һары, тулы.
Төлкө (ниндәй?) хәйләкәр, етеҙ.

***Билдәне белдерә торған һүҙҙәргә ҡарап, предмет исемен табып яҙырға(мәҫәлән, йәшел ҡыяр)***

*Йәшел,йомшаҡ, йомро, мөләйем,*

*һөйкөмлө, йәш, тыйнаҡ, яҙғы,*

*йәмле,ышаныслы, оялсан, өлгөр.*

# ЙОМАҠТАР

Ул – йомшаҡ, иркә, күҙҙәре

йәшел



Ул- ҡыҙыл да, йәшел дә,

һары ла, баллы ла, әсе лә

  

# Ул – ерән, йомшаҡ,етеҙ, хәйләкәр



Еңел, түңәрәк, зәңгәр, оса торған



Ҡара, мөгөзлө, бесән ярата, һөт бирә



## *Һөйләмде дауам  ит*

- Ҡышын көн ҡыҫҡа, ә төн ... .

- Китап ҡалын, ә дәфтәр ... .

- Алма баллы, ә лимон ... .

- Ҡар йомшаҡ, ә боз ... .

- Шәкәр аҡ, ә күмер ...

# *Һәр юлдағы “артыҡ һүҙҙе тап”*

- Ҡыяр, япраҡ, йәшел, ағас.
- Хәйләкәр, ҡыҙ, уҡыусы, малай.
- Дәфтәр, ҡәләм, китап, ҡояшлы.
- Кишер, ҙур, сөгөлдөр, кәбеҫтә.

# **Өйгә эш:**

3-сө күнегеү, 96-сы бит